МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

## Фольклор байрамы

# "Ҡарға буткаһы"

# *Фольклор байрамы “ Ҡарға бутҡаһы”.*

Ҡурайҙа көй уйнай.Балалар ҡысҡырышҡан тауыш ишетелә: “Ҡарға бутҡаһы”, “Ҡарға бутҡаһы”.бала-саға килеп инә.Ҡайһы бере ҡолға күтәргән.Ҡолғаларға – ҡулъяулыҡтар, һөлгөләр.Ҡайһылары кәпәс тотҡан, моҡсай йөкмәгәндәр.



**Малай**:Ҡар-ҡар-ҡар-ҡар,

Ҡарға туйға бар-бар

Ҡарға туйға бармағандың

Күңеле булыр тар-тар.

Шаулаша-шаулаша төрлө яҡтан ҡыҙҙар,килендәр,ҡатындар,әбейҙәр инә.

**Малай**:Һөлгө йыям,күрегеҙ,

Һеҙҙә бүләк бирегеҙ.

Аллы-гөллө һөлгө тағып,

Ҡарға туйға килегеҙ.

Малайҙарҙың арҡаһынан ҡаға-ҡаға,ҡатын-ҡыҙҙар улар күтәргән ҡолғаларға төрлө төҫтән сепрәктәр,таҫмалар,һөлгөләр,яулыҡтар тағалар,моҡсаларына йоморҡа,ярма тултыралар.Хуплау тауыштары иштелә.

**Өләсәй:**Изге хәбәрегеҙ өсөн ауыҙығыҙға бал ағайым(малайҙарға бал ҡаптыра)

**Малайҙар:**Рәхмәт өләсәй!

**Өләсәй:**Изге хәбәрегеҙ өсөн ауыҙығыҙға һары май(малайҙарға май ҡаптыра).

**Малайҙар:**Рәхмәт өләсәй!

Бала-саға ҡарҡылдаша-ҡарҡылдаша сыға баҫлай.

**Балалар**:Ҡар-ҡар-ҡар-ҡар

Ҡарға туйға бар,бар,

Өлкәндәрҙә сығалар.

Урмандағы аҡлан.Тирә-яҡта ағастар.Ҡурайҙа көй яңғырай.шул көйгә ике яҡтан ҡарт-ҡоро,ҡыҙ-ҡырҡын,малайҙар килеп инә.Улар күңелле шаулашалар.Берәүҙәр табаҡ менән ярма тотҡан,икенселәре самауыр тотҡан,батмуста сынаяҡтар,һыу көйәнтәләгәндәр,ҡаҙан тотҡандар.

**Өләсәй:**(Өҫтөндә елән,ҡашмау,беләҙектәр,бүрек)Бына һау булғас,ҡарғалар ҡайтып,ҡар бөтөп,ҡара ергә баҫыр көн дә тыуҙы.(Хуплау һүҙҙәре ишетелә: "шулай,шулай ҡуй инде")



**Өләсәй:**Әйҙәгеҙ ошо матур яҙҙы маҡтап,йыр йырлап ебәрәйек.

***Йыр "Яҙғы тамсылар"***

**Өләсәй**:Балалар,тәбиғәт ул тиңһеҙ хазина.Уны һаҡлайыҡ.Кәрәк-кәрәкмәгәнгә ағастарҙы һындырмайыҡ,ҡош-ҡорт йоморткаларына ла теймәйек.Ә хәҙер әйҙә бына ошо матур ҡайын ағасын суҡлайыҡ әле.

Ҡыҙҙар ағас ботағына таҫмалар,тәңкәләр таға:



- Сылтырашып торһондар
- Елберләшеп торһондар
- Беҙҙе иҫләп торһондар
- Ҡотто һаҡлап торһондар
- Ырыҫ теләп торһондар
- Яман күҙҙән һаҡлаһындар
- Татыулыҡты маҡтаһындар
- Ғәҙеллекте яҡлаһындар
- Именлек теләһендәр

**Ҡыҙ**:Өләсәй, ағасты суҡлау нимәне аңлата ул?

**Өләсәй:** Ағасты суҡлау,йәғни биҙәү,ул ағастың сәскә атыуын,емеш биреүен теләүҙе аңлата.Ярай,өлкәндәр ил-йорт хәлдәрен һөйләшә торһон.Урта йәштәгеләр ана тегендә ҡаҙан аҫып бутҡа бешерһен.Килендәр сәй ҡайнатһын.Ҡыҙҙар, малайҙар бында тороп ҡалһын.

**Өләсәй:** Ярай, әйҙәгеҙ бутҡа бешкәнсе тәнде яҙып,ҡанды ҡыҙҙырып оло торайыҡ.Йә бала-саға башлап ебәрегеҙ әле.

**Ҡыҙ:** Әйҙә бейергә.

**Ҡыҙ:**Әйҙәгеҙ түңәрәктә уйнап алайыҡ бергәләп.

***Түңәрәк уйын "Яҙ апай килә"***

**Өләсәй:** Ярай,бейешеп-йырлашып алдыҡ, ә хәҙер уйнап та алайыҡ.

**Бала**:Әйҙәгеҙ,үгеҙ йөҙөк уйнайыҡ.

***Уйын "Үгеҙ йөҙөк".***

**Өләсәй:** Ә хәҙер кем сос, кем сая,кем көслө икән?Бәйге!!!

**Бөтәһе лә**:Бәйге-бәйге!

***Уйын "Ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү".***

**Өләсәй:** Бик күңелле булды!Ярар.афарин балалар!бутҡа бешмәйме әле?

**Килен:**Бешеп килә.Хәҙер әҙер була.

**Бала:** Өләсәй, нишләп был байрамды "Ҡарға бутҡаһы" тигәндәр ул?

**Өләсәй:б**орон-борон заманда кешеләр ни өсөн яҙ булғанын белмәгәндәр.Улар йәмле яҙҙы ҡара ҡарғалар алып килә тип уйлағандар.Шуға ҡарҙар ireп, һыуҙар аға башлағас, ҡарғалар килеү хөрмәтенә байрам яһай торған булғандар.Ер-һыуҙарҙы,йәнлек-ҡоштарҙы хөрмәтләп, шундай йолалар уйлап сығарғандар.был көндө байрамға хас теләктәр әйткәндәр, ерҙән муллыҡ,күктән ямғыр,ҡояштан йылылыҡ,тәбиғәттән бәрәкәт, ғаиләгә именлек теләгәндәр.Шулай балалар,һеҙҙә Ер әсәбеҙҙең, тәбиғәттең ҡәҙерен белеп,ошондай йолаларыбыҙҙы онотмай йәшәһәгеҙ бик һәйбәт булыр ине.Ә хәҙер йырлап алайыҡ әле.

***Йыр "Яҙ килә"***

**Килен**(Бутҡаны тәмләп ҡарап):Бутҡа беште.

Беште ҡарға бутҡаһы

Ауыҙ итәйек әле

Матур яҙҙы ҡаршылап.

Байрам итәйек әле.



Бутҡаны балалар янына алып бара.Бөтәһе лә һауыт әҙерләп ултырыша.

**Өләсәй**: Әпәләмә-түпәләмә

Туҫтаҡҡайым тулым кит.

**Килен**:ашып сыҡ,тулып сыҡ

Ҡайҙан сыҡһаң,шунан сыҡ.

Килен бутка һалып сыға.Бөтәһе лә бутка ашай.көй яңғырай.Ашап бөткәс сеүәтәләрен түңкәреп,ҡалаҡтарын шаҡый-шаҡый һамаҡлайҙар.

**Балалар:**

Быгыр-быгыр бутҡа бешә

Уртаһына аҡ май төшә

Яу ямғырым яу-яу

Яу-яу ямғырым

Һимеҙ һарыҡ һуйырмын

Түшен үҙем алырмын

Эсен һиңә ҡуйырмын

Яу-яу ямғырым!

**Өләсәй:**Балалар әйҙәгеҙ ҡалған бутҡаны ҡарғаларға бирәйек.Ямғырҙы ваҡытында яуҙырһын,илгә именлек,беҙгә туҡлыҡ,һаулыҡ теләһен.*(төрлө ергә бутҡа һалалар).*

**Өләсәй:** Көймәләре һәйкелсәк

Арбалары ҡалтырсаҡ

Ҡарға туйы булды тамам

Инде килде ҡайтыр саҡ.

Арғы яҡта - һаҙ һайын

Бирге яҡта - аҙ ҡайын

Имен торһон донъялар

Күрешербеҙ яҙ һайын.

Балалар көн кискә ауышты, инде ҡайтырға ваҡыт. *(Балалар ҡайталар)*